Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

Эҫәмәт байрағы

Газета 1931 йылдың 1 ноябренән сыға

Башҡорт АССР-ы, КПСС-тың Хәйбулла район комитеты һәм халыҡ депутаттарының район Советы органы

№ 11 (5670) Шишәмбе, 25 ғинуар, 1983 йыл. Хаҡы 2 тин.

ЯРЫШ КӨНДӘЛЕГЕ

1983 йылдың өсөнсө аҙнаһында, 17—23 ғинуарҙа, һөтсөлөк фермалары коллективтары араһындағы социалистик ярышта **Аҡъяр совхозының Татыр-Үҙәк һөтсөлөк фермаһы коллективы** (бригадиры Р. И. Фәмәров) еңеүсе тип табылды, ул бер аҙнала һәр һыйырҙан 48-әр килограмм һөт науған.

Татыр-Үҙәк һөтсөлөк фермаһы коллективына КПСС райкомы, халыҡ депутаттарының район Советы башҡарма комитеты, ауыл хужалығы работниктары профсоюзы райкомы президиумы һәм ВЛКСМ райкомының **күсмә вымпелы** тапшырылды.

Таналыҡ совхозының Таштуғай һөтсөлөк фермаһы коллективы (бригадиры Т. И. Магашев) **икенсе урында,** ул 47-шәр килограмм һөт науған.

Аҡъяр совхозының Бызаулыҡ һөтсөлөк фермаһы коллективы (бригадиры Ф. Ш. Италмасов) **өсөнсө урында,** ул 46-шар килограмм һөт науған.

Ленин орденлы Матрай совхозының Үҙәк һөтсөлөк фермаһы коллективы (бригадиры Л. В. Иванов) **дүртенсе урында,** ул 43-әр килограмм һөт науған.

Артта киләләр: «Красное знамя» колхозының Атҡаған (ферма мәдире З. Х. Абдуллин), Маҡан совхозының Мәмбәт (бригадиры Р. Ш. Хәсәнов) һөтсөлөк фермалары коллективтары, уларҙың тәүгеһе 21-әр, икенсеһе 22-шәр килограмм һөт науған.

Ленин исемендәге, «Һаҡмар» һәм Салауат исемендәге колхоздар йыл башынан бирле фермаларҙың аҙналыҡ ярышы йомғаҡтарын тапшырмайҙар.

КПСС-тың XXVI съезды ҡарарҙарын — тормошҡа!

Хеҙмәт вахтаһында — комсомолецтар

Ун беренсе биш йыллыҡтың икенсе йылы тамамланды. Уның йомғаҡтары район йәштәренең, СССР-ҙың тәҙәләүенә 60 йыл тулыуҙы лайыҡлы ҡаршылау өсөн көрәшеп, экономика һәм культура өлкәһендә һәйбәт һөҙөмтәләргә өлгәшеүе, производстволың күп кенә тармаҡтарын үҫтереүҙең тоторохло темптарын тәьмин итеүе тураһында һөйләй.

Маҫәлән, Бүребай руда идаралығының комсомолецтары һәм йәштәре социалистик өкләмәләрен уңышлы үтәп сыҡты. Проходчиктар бригадаһы бригадиры Александр Нестеренко йыл йомғаҡтары буйынса райондың иң яҡшы йәш шахтеры тип табылды.

Район комсомолецтары һәм йәштәре Аҙаҡ-гүлек программаһын тормошҡа ашырыуҙа ҡатнашыуҙы үҙәренең төп эше итеп ҡабул итте. Ҡыҙыл байраклы Таналыҡ совхозының Үҙәк бүлексәһе комплексы [начальнигы И. В. Дробот, групкомсоргы Фәлә Мәжитов] иң яҡшы комсомолец-йәштәр комплексы тип табылды. Йәш комбайнерҙар: Маҡан совхозынан Анатолий Кулиненко, Аҡъяр совхозынан Хәлит Байгужин, Таналыҡ совхозынан Наил Динмөхәмәтов 1982 йылғы уракта иң юғары хеҙмәт итештереүсәнлегенә өлгәшеләр. Ә Анатолий Кулиненко, 10546 центнер иген һөнөрө, СССР летчик-космонавтарының ҡотлау хатына лайыҡ булды.

Йәш малсылар малсылыҡ продукцияларын етештерелеп һатыуға ҙур өлөш индерә. Бында йәш малсылар «Красный доброволец» колхозынан Венера Кубилова, Хәйбулла совхозынан Наташа Казанова, Таналыҡ совхозынан Людмила Соломонова, «Красное знамя» колхозынан Миҡәләә Арсланова һәм башҡалар айырыуса тырышып эшләне. Йәш науысы Людмила Соломонова былтыр һәр һыйырҙан уртаса 3085-әр килограмм һөт науып алды.

Мал ҡышлатыуҙың уңышы иң беренсе сиратта малсыларҙың эшкә булған мөнәсәбәтенә, үҙ хеҙмәтенең һөҙөмтәләре өсөн юғары яуаплылығына бәйланған. Комсомол ойошмаларына уларҙың хеҙмәт һәм конкурс шарттары, иң юғары һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн мораль һәм материаль яҡтан ҡыҙыҡһындырыу, профессиональ оҫталыҡты күтәреү хаҡында хәстәрлек күрергә кәрәк.

Район производство алдынғыларының яҡырак булып уҡыған спетында ун беренсе биш йыллыҡтың өсөнсө йылына социалистик өкләмәләр ҡабул ителде. Районыбыҙ комсомолецтары һәм йәштәре уларҙы намыҫ менән үтәргә һәм КПСС-тың XXVI һәм ВЛКСМ-дың XIX съездары ҡарарҙарын үтәүгә үҙәренең лайыҡлы өлөшөн индерергә иҫәп тота.

ЙӘШ АЛДЫНҒЫЛАР СЛЕТЫ

17 ғинуарҙа район культура йортонда производстволың йәш алдынғылары слеты булып үтте.

«Комсомолец - йәштәр коллективтарының 1982 йылғы эш йомғаҡтары һәм 1983 йылға бурыстары тураһында»ғы доклад менән ВЛКСМ райкомының беренсе секретары **Ә. С. Әбделмәнов** сығыш яһаны.

Шулай уҡ «Урак-82» чемпионы, Маҡан совхозы электрослесары **Анатолий Кулиненко,** Ҡыҙыл байраклы Таналыҡ совхозының урып йыйыу-транспорт комплексы групкомсоргы **Фәлә Мәжитов,** 1-се Аҡъяр урта мәктәбе уҡытыусыны **Урал Бохарбаев,** Таналыҡ совхозының комсомолецтар комитеты секретарь **Салауат Абдәев,** район эске эштәр бүлегенең комсомол ойошмаһы секретары **Камил Маннапов** сығыш яһаны.

Йәш алдынғыларҙың слетында ҡатнашыусыларҙың район комсомолецтарына, бөтә йәш эшсәндәренә Мөрәжәғәте ҡабул ителде.

Ун бер йәш алдынғыға «Һөнәре буйынса иң яҡшы» тиҙгән исем бирелде. Уларға Дипломдар, «Ун беренсе биш йыллыҡтың йәш ҡаһаманы» знаҡтары, ҡиммәтле бүләктәр тапшырылды, уларҙың исемдәре Почет кенәгәһенә индерелде.

Производстволың йәш алдынғылары слеты эше аҙағында ВЛКСМ-дың Өлкә Комитеты инструкторы **Ф. Ш. Моталәва** ҡатнашты.

ҺҮРӘТТӘ: Һөнәрҙәре буйынса иң яҡшылар тип табылған бер төркөм йәш алдынғылар.

В. УСМАНОВ фотоһы.

Уның йөкләмәһе — 2700 килограмм

Александра Катунина мәктәптә уҡыған сағында ук әле малсылыҡта эшләү хаҡында хыяллана. Мәктәпте тамамлағас, бызау ҡараусы булып эшкә килә. Бөтә күңелен биреп эшләй, бер нисә йылдан ҡыҙ хатта тәжрибәле малсыларҙы ла уҙып китә.

Һуңынан Александра Александровнаға Аҡъяр совхозының Хворостянко бүлексәһендә науынсы булып эшләргә тәҡдим итәләр. Ул ҡыуанып риза була. Тәүҙә ауырлыҡтар осрай, әммә әкренләп эшкә күнегә һәм тәжрибә туплап ала. Хәҙер Александра ете йыл инде һыйыр һауа. Тырышлығы һәм эш һөйөүсәнлеге менән науымды йылдан-йыл арттыра.

А. А. Катунина яңы биш йыллыҡта айырыуса уңышлы эшләй. Биш йыллыҡтың икенсе йылында, «СССР-ҙың 60 йыллығына — 60 удар аҙна» девизы аҫтында ярышып һәм Аҙаҡ-гүлек программаһын тормошҡа ашырыуға лайыҡлы өлөш индерергә ынтылып, ул 18 һыйырының һәр береһенән йөкләмәләге 2500 урынына 2617-шәр килограмм һөт алды һәм коллективта икенсе урынға сыҡты. Надежда Лямина иҫә беренселектә үҙе ҡулынан ысҡындырманы.

Александра биш йыллыҡтың өсөнсө йылына яңы үҙәр билдәләне — һәр һыйырҙан уртаса 2700-әр килограмм һөт науырға булды. Яңы йөкләмәһен үтәү өҫтәндә тырышып эшләй.

Хәҙер уның төркөмөндә 19 һыйырҙың 11-е бызауланы. Ошо көндәрҙә һәр һыйырҙан уртаса 7-шәр килограмм һөт науып ала. Бер һыйырҙары һәр ваҡыт көр һәм таҙа.

Партия һәм хөкүмәтебеҙ ауыл эшсәндәре тураһында даими хәстәрлек күрә. Эш хаҡы арта, малсыларға эш стажы өсөн өҫтәмә аҡса түләнә. Ошоларға яуап итеп, тип һөйләй А. А. Катунина, мин социалистик өкләмәләремде тултырыу өсөн үҙ көсемдә өлгөрмәйәсәкмен.

З. БАЛАПАНОВ,
ауыл хәбәрсеһе.

ҠОТЛАЙБЫҘ!

СССР-ҙың 60 йыллығы хөрмәтенә йәйелдерелгән социалистик ярыш барышында өлгөшелгән юғары производство күрһәткестәре өсөн РОНО инспекторы **Атаәв Әйүп Кәрим улы,** Уфимск урта мәктәбе уҡытыусыны **Каскынова Факия Нурый ҡыҙы** еңеүселәр тип табылды һәм ВЛКСМ Үҙәк Комитетының Почет грамоталары менән наградланды.

Таналыҡ совхозының комсомол урып йыйыу-транспорт звеноһы етәксеһе **Наил Динмөхәмәтов** ВЛКСМ Өлкә Комитетының вымпелына һәм Почет грамотаһына лайыҡ булды.

Таналыҡ совхозының комсомолецтар комитеты секретары **Салауат Абдәев,** «Степной» совхозының баш зоотехнигы **Булат Фәлиев,** «Красное знамя» колхозы экономисы **Йомабай Байгужин,** район больницаһы медсестраһы **Сания Кәримова** ВЛКСМ Өлкә Комитетының Почет грамоталары менән наградланды.

Һөт науып алыу барышы

(ҒИНУАРҘЫҢ 23 КӨНӨНДӘ)

Беренсе графала—хужалыҡтар, **икенсеһендә**—ай башынан науылған, **өсөнсөһөндә**—былтырғы шул уҡ осор менән сағыштырғанда +, — (һәр һыйырҙан килограмдарҙа).

Колхоздар:			Совхоздар:		
Калинин исем.	115	— 5	Матрай	125	+39
Һаҡмар	113	+ 3	Аҡъяр	124	—11
Салауат исем.	101	+ 8	Таналыҡ	116	+12
Ленин исем.	99	—11	Хәйбулла	113	+17
Новый путь	96	+ 9	Степной	74	+14
Кр. доброволец	88	+ 7	Маҡан	73	— 10
Красное знамя	84	— 4	**Район буйынса:**	106	+ 7

Колхоздар һәм совхоздарҙан һөтсөлөк фермалары эшсәндәре һөт етештереү һәм уны дәүләткә һатыу буйынса юғары үҙәр билдәләне. Маҫәлән, 1983 йылда һәр һыйырҙан уртаса науым бынан алдағы йыл менән сағыштырғанда 203 килограмға йәки 8,5 процентҡа, т/лайым һөт етештереү—21 процентҡа һәм уны дәүләткә һатыу 18 процентҡа артырға тейеш.

Ошо йөкләмәләрҙе үтәү өсөн һәр фермала яңы йылдың тәүге көндәренән үҡ эште ҡыҙыулатырға кәрәк, шунһыҙ йөкләмә үтәлмәй ҡалырға мөмкин. Маҫәлән, ғинуарҙың 23 көнөндә тулайым етештерелгән һөт уҙған йылдың шул уҡ осорона ҡарағанда 18 процентҡа, ә һәр һыйырҙан науым 7 процентҡа күберәк, былар ҡабул ителгән йөкләмәләргә ярашлы түгел.

Яңы йылдың тәүге айынан уҡ былтырғы кимәлдән түбән эшләгәс, Калинин исемендәге, «Красное знамя», Ленин исемендәге колхоздар, Аҡъяр һәм Маҡан совхоздары социалистик йөкләмәләрен нисек үтәргә уйлай икән?

Билдәләнгән үҙәргә өлгәшеү өсөн партия, профсоюз ойошмаларының, хужалыҡ етәкселәренең һәм белгестәрҙең ныҡышмалы эше талап ителә, социалистик ярышҡа даими рәүештә йомғаҡ яһарға һәм уның һөҙөмтәләренең киң билдәләнеүен тәьмин итергә кәрәк. Ә быға Салауат исемендәге, «Һаҡмар» колхоздарында һәм Һирәк-ҺаяҡЛенин исемендәге колхозда етәкселәр фермаларҙағы эштәрҙең торошон айҙар буйына белмәйҙәр, кемдең күпме һөт науып алыуы һәм алда барыуы менән ҡыҙыҡһынмайҙар. Ә бит улар көн һайын эшкә йомғаҡ яһап барырға тейеш,

КПСС Үҙәк Комитетының ноябрь Пленумы ҡарарҙарын үтәү буйынса бурыстарҙы тикшерәбеҙ

Яңы рубеждар билдәләп

«Новый путь» колхозында яңырах булып уҡған партия йыйылышында коммунистар КПСС Үҙәк Комитетының ноябрь (1982 йыл) Пленумы материалдарын тикшерҙе, унда доклад менән партком секретары У. Б. Ҡәримов сығыш яҡаны.

Колхоз эшсәндәре, тиҫе үҙенең сығышында докладсы, ССР Союзы төҙәлеүҙең 60 йыллығы йыһын хеҙмәттәге ҡайһы бер ыҡтай һөҙөмтәләр менән тамамланы. Ит, йән һатыу пландары үтәлде. Дәүләткә 2834 центнер ит, 253 центнер йән һатылды. Ләкин дәүләткә һөт һатыу буйынса план (96,8 процент) үтәлмәне. Иген һатыу буйынса ла план үтәлмәй ҡалды, пландағы 45 мең урынына 28394 центнер иген оҙатылды. Бында, әлбиттә, объектив сәбәптәр ҙә булды: ҡорлоҡ үҙенекен итте. Әммә субъективҡ сәбәптәр ҙә булмаҡы түгел. Сәсеүлектәрҙең насар эшкәртелеүе һөҙөмтәһендә уңыш алып еткерелмәне, орлоҡтарҙы сәсеү һәм күмдереү нормаһы бөтә бағыуҙарҙа ла тигеҙ булманы. Урып йыйыу ваҡытында уңышты юғалтыуға юл ҡуйылды.

Малсылыҡта билдәле бер алға китеш бар, биш йыллыҡтың тәүге йылына ҡарағанда яҡшырах эшләнеләр. 1983 йылдың 1 гинуарына ҡарата 1300 баш һыйыр малы, 5500 баш һарыҡ, 1 мең баш суска иҫәпләнә. Малдар һанын ишәйтеү планы бөтә төр буйынса ла үтәлә.

Әммә, КПСС Үҙәк Комитеты Пленумы материалдарында һәм СССР Верховный Советы сессияһында әйтелеүенсә, производствоның эффектлылығына боролош һаман да әле аҡрын ғәмәлгә ашырыла. Пландар әлеккесә ҙур сығымдар һәм производство тоҡсарлыҡтары менән үтәлә. Алдан иҫәпләп сығарыу буйынса, 1 центнер иген етештереүҙең ҙәҡиммәте 3 һум 60 тиңгә күтәрелә, һөт етештереүҙең ҙәҡиммәте юғары (22 һум), һыйыр малдарының 1 центнер ауырлығы 203 һум 79 тиң тәшкил итә, ә «Степной» совхозында 145 һумдан артмай.

1982 йылда рентабеллелек кимәле байтаҡҡа кәмене. Әгәр ун беренсе биш йыллыҡтың тәүге йылында 350 мең һумдан күберәк саф доход алынна, 1982 йылда ул 73 мең һум самаһы тәшкил итә.

Кыҙғаныҫҡа ҡаршы, совхозда хужаһыҙлылыҡ һәм ҡарам-шәрәм итеү фактҙары һаман урын алып килә. 1982 йылда бөтә төр малдарҙың үлеү осраҡы күп булды, колхозға ҙур материаль зыян килтерелде. Мәҫәлән, бер йылда 143 баш һыйыр малы үлде, был кәтәй әйләнешенә ҡарата 11,9 процент тәшкил итә, ә районда буйынса был һан 3 тапҡырға тиерлек кәм. 58 баш суска (6,2 процент), 710 баш һарыҡ (12 процент) үлде. Былар колхозда ветеринария хеҙмәтенең насар эшләү һөҙөмтәһе булып тора.

КПСС-тың XXVI съезы, КПСС Үҙәк Комитетының май һәм ноябрь (1982 йыл) Пленумдары тарафынан күрһәтелгән ҙур бурыстарҙы хәл итеү партия, совет һәм хужалыҡ аппараты хәҙрҙәрҙәнә, йәмәғәт ойошмалары работниктарына яңы, тағы ла юғарырах талаптар ҡуя.

Йыйылышта сығыш яһаусы коммунистар хужаһыҙлылыҡҡа, ҡарам-шәрәм итеүселәргә ҡарата ныҡлы кәрәш алып барыу ҡараклеген әйттеләр. Был бурысты һәр коммунистың һәм колхозсының ҡатнашлығында ғына хәл итергә мөмкин.

Мәҫәлән, колхоздың баш экономисы Н. Л. Сәләймәнов, бөтә төр малдарҙың үлеүе йыл һайын арта бара, һәм был колхозға ҙур материаль зыян килтерә, тип билдәләне.

Икенсе бригада фермаһы мөдире А. Р. Ҡусәков мал ҡышлатыу барышын туҡталды. Быйыл, тиҫе ул, эш яҡшырах бара, һауым һәм урсем алыу юғары. Мал яңы аҙбарға күсерелде, ләкин тиҙәк транспортеры йыш ҡына сафтан сыға. Һауынсылар йәш коммунист Рәсимә Асҡарова, Зәйтүнә Мәмбәтова, Әхмәт Ҡәримовтар яҡшы эшләйҙәр, улар юбилей йылына хәбәр итмәй социалистик йәкләмәләрен уңышлы үтәне, һауым ҡурты малсылары Ринат Асҡаров, Радик Ураков, Уйылдан Абдуллин һәм башҡа күптәр һыр бирмәйҙәр. Колхоз производствоһын күтәреү резервтары бар, әлбиттә, быны эсен иң әлек яуаплылыҡты күтәрергә һәм хеҙмәт дисциплинаһын ныҡытырға ҡәрәк. Был турала беренсе комплексты бригада бригадиры З. Ф. Ҡырымгужин, сварщик Н. Х. Ильясов һәм башҡа коммунистар ҙа әйтеп үтте.

Колхоз парткомы, бригадаларҙың партия ойошмалары, идараһы был мәсьәләне өҫтәнә кеҫ дә эшләй, ләкин етди ҡәмселектәр бар әле. Коммунистар етәкселәр һәм белгестәрҙе тапшырылған эшкә ҡарата яуаплыҡ ҡарау фактҙарына аяуһыҙ кәрәш алып барырға сәҡырҙы.

КПСС Үҙәк Комитеты ноябрь (1982 йыл) Пленумы талаптары нигеҙендә коммунистар партия ойошмаларының идеология һәм ойоштороу эшенә анализ яһаны һәм колхоз производствоһының бөтә тармаҡтарында ла партия йоғонтоһон ҡәйтеү иң мөһим бурыс булып ҡалыуын билдәләне.

Ун беренсе биш йыллыҡтың өсөнсө йылында колхоз коммунистары алдында ҙур бурыстар тора. Улар был бурыстарҙың ҡәҙәрҙәнә тулы шәнәс белдерҙе.

Ф. ДӘҮЛӘТОВ.

Коммунистар тураһында һөйләйбеҙ

Уңыш тир түгеп табыла

Производствоның күп кенә йәш алдынғыларына булған кеүек үк, Фәтих Игебаевҡа ла ҙур йыл ҙәнсәлекле булды. Ул үҙенең ауыр, әммә хөрмәткә лайыҡлы ауыл эшсәне хеҙмәтендә ҙур уңышҡа иреште. ССР Союзы төҙәлеүҙең 60 йыллығы хөрмәтенә ҡуйылған социалистик ярыш йомғаҡтары буйынса ул һәр бер буйынса иң яҡшы тип табылды.

Бындай уңыш бик еңел килмәй, әлбиттә, ул ныҡышмалы һәм фиҙаҡар хеҙмәт, оҫталығынды даими күтәрә барыуҙы талап итә. Уның механизаторлыҡ стажы ҙур түгел — «ДТ-75 М» тракторы рычаҡы артына ултырыуына ҡырҡ йыл ғына булыуға ҡарамаҫтан, ҙур һөнәрен ул камил үҙләштергән.

Производство күрһәткестәре йыл һайын арта бара. Мәҫәлән, былтыр Фәтих шартлы 1300 эталон гектар ер һөрөргә һүҙ биргәйне, һәм үҙенең ниәмәһен ваҡытынан элек үтәне. Кәҙәр генә лә ул 350 гектар майҙанда ерҙе туҡ ҡа һөрҙө.

Хәҙер Фәтих Игебаев алдағы яҙғы-баҫыу кампанияһына тағы ла әҙерләнә, тракторын февралгә ремонтлап бөтөргә ниәтләй. Әммә был эштең тик башы ғына, әлбиттә, культивациялау, паҡ һөрөү, туҡ ҡа һөрөү эштәре алда әле.

Үткән йылда Ҡыҙыл байраҡлы совхоз эшсәндәренең ауыл хужалығы продукцияһын етештереү һәм уны дәүләткә һатыу буйынса пландарын уңышлы үтәүендә йәш коммунист Фәтих Игебаевтың да тос хеҙмәт өлөшө бар.

Быйыл да ул юғары социалистик йәкләмә алды. КПСС-тың XXVI съезы, партия Үҙәк Комитетының май һәм ноябрь (1982 йыл) Пленумдарының тарихи ҡарарҙарын үтәүҙә был уның өлөшө буласаҡ.

Ф. ГУСЕВ,

«Красное знамя» колхозының комсомолецтар секретары.

ҺҮРӘТТӘ: Ф. Игебаев.

ПРОИЗВОДСТВОНЫҢ ЙӘШ АЛДЫНҒЫЛАРЫ СЛЕТЫНДА ҠАТНАШЫУСЫЛАРҘЫҢ РАЙОН КОМСОМОЛЕЦТАРЫНА, БӨТӘ ЙӘШ ЭШСӘНДӘРЕНӘ

МӨРӘЖӘҒӘТЕ

Беҙ, 1982 йылғы производствоның йәш алдынғыларының район слетында ҡатнашыусылар, КПСС-тың XXVI съезы һәм ВЛКСМ-дың XIX съезының тарихи ҡарарҙары тарафынан дәртләнеп, илебеҙҙең Аҙыҡ-түлек программаһын уңышлы тормошҡа ашырыу буйынса социалистик ярыш йәйелдерҙек.

Ун беренсе биш йыллыҡтың икенсе йылында районыбыҙ эшсәндәре, фиҙаҡар хеҙмәт өлгәһе күрһәтеп, һәйбәт һөҙөмтәләргә өлгөште, уларҙ ауыл хужалығы продукцияһының мөһим төрҙәрен һатыу буйынса дәүләт планын уңышлы үтәне.

Бында комсомолецтарҙың, йәш эшселәр һәм колхозсыларҙың да ҙур хеҙмәт өлөшө бар. Уларҙың күптәре үҙәренең социалистик йәкләмәләрен ваҡытынан элек тултырҙы. Шуның менән улар хеҙмәткә коммунистик ҡараш өлгәһе күрһәтә, райондың йәштәре арасындағы социалистик ярышта алдҡ килә.

Беҙ йәш колхозсыларға һәм эшселәргә ун беренсе биш йыллыҡтың өсөнсө йылында ауыл хужалығы продукцияһын етештереүҙе һәм һатыуҙы арттырыу, баҫыуҙарҙың уңдырышлылығын күтәрәү, промышленность производствоһы күләмен арттырыу өсөн социалистик ярыш байрағын тағы ла юғарырах тоторға мөрәжәғәт итәбеҙ.

Йәш механизаторҙар, инженер-техник работниктар, игенселәрҙе киләсәк уңыш өсөн үҙенең юғары яуаплылығын тойорға, уның нигеҙе бөгөн һалыныуын онотмаҫҡа сәҡырабыҙ. Яҙы бөтә яҡлап әҙер, сифатлы һәм срогында әҙерләнгән ауыл хужалығы техникаһы менән ҡаршылаясаҡбыҙ, машина-трактор паркының һәм смена етештереүсәнлеген күтәрәсәкбеҙ.

Беҙ, производствоның йәш алдынғылары слетында ҡатнашыусылар, райондың бөтә йәш эшсәндәрен продукцияны арттырыу, уның сифатын күтәрәү һәм үҙкиммәтен кәметеү өсөн тағы ла юғарыраҡ дәрәжә менән көрәшергә сәҡырабыҙ.

Ҡыш малсылар өсөн етди имтихан ул. Тап былтыр ошо осор быйылғы йылдың һөҙөмтәһен билдәләй ҙә инде. Шуға күрә беҙ ҙәҫебеҙҙәк бөтә өлкән иптәштәребеҙ менән бергә аҙыҡты рациональ файҙаланыу буйынса хәстәрлек күрәсәкбеҙ, алдынғы тәжрибәне өйрәнеүҙе ойоштурасаҡбыҙ, һәм фән һәм техниканың, алдынғы технологияның һәм тәҡдимдәрен практикала ҡулланасаҡбыҙ. Мал ҡышлатыу осоронда һәр һыйырҙан уртаса кәмендә 1700 килограмм һөт алыуға өлгәшәсәкбеҙ.

Промышленность предприятиеларының йәш эшселәрен ун беренсе биш йыллыҡтың өсөнсө йылының пландарын ваҡытынан элек үтәү өсөн көрәш йәйелдерергә сәҡырабыҙ.

Дәүләт беҙҙән, йәш эшсәндәрҙән, яңы ҡаҙаныштар һәм хеҙмәт еңеүҙәрә көтә. Бөтә Союз социалистик ярышында юғары күрһәткестәргә өлгөшеү өсөн бөтә көсөбөҙҙө, белемебеҙҙе, оҫталығыбыҙҙы һәм тәжрибәбеҙҙе ҡаласаҡбыҙ. Беҙҙе, комсомолецтар һәм йәш эшсәндәрҙе, лайыҡлы алмаш тип атап йөрөтәләр, һәм беҙ райондың бөтә йәштәре исемәнән Коммунистар партияһына аталарса хәстәрлеге һәм аяҙ күңеләр өсөн рәхмәт әйтәбеҙ, һәм, районыбыҙ егеттәре һәм ҡыҙҙары ҙәҙәренең социалистик йәкләмәләрен уңышлы үтәйәсәк һәм Бөйөк Октябрҙең 66 йыллығын һөйөклө Ватаныбыҙ хаҡына хеҙмәттәге яңы уңыштары менән билдәләйәсәк, Аҙыҡ-түлек программаһын тормошҡа ашырыуға, социалистик державаның экономик һәм оборона ҡеүәтен нығытыуға лайыҡлы өлөш индерәсәк, тип ышаныс белдерәбеҙ.

Мөрәжәғәт производствоның йәш алдынғылары слетында тикшерелде һәм ҡабул ителде.

БАЙРАҠ КИРОМАНОВ—Бүребай руда идаралығы автотранспорт цехының социалистик ярышында еңеүселәр иҫәбенә ингән алдынғы шоферҙарҙың береһе. Ун беренсе биш йыллыҡтың икенсе йылында йәш шофер «КРАЗ-256» автомашинаһында план буйынса 400000 урынына 468 мең тонна-километр эшләне. Коммунистик хеҙмәт ударнигы Кироманов хәҙерге көндә яңы КамАЗ-5511 автомашинаһында эшләй.

ҺҮРӘТТӘ: Б. Кироманов.

В. УСМАНОВ фотоһы.

Ведомство-ара ҡәҙәшмә

Яңырах райсовет башҡарма комитетының ултырыштар залында хоҡуҡ һаҡлау органдарының ведомство-ара ҡәҙәшмәһе булып үтте, унда «КПСС Үҙәк Комитетының 1979 йыл 2 августағы «Хоҡуҡ тәртибен һаҡлау эшен яҡшыртыу һәм тәртип бозоусыларға ҡаршы көрәштә ҡәйтеү тураһындағы ҡарарын үтәү буйынса райондың хоҡуҡ тәртибен һаҡлау органдарының 1982 йылғы эш йомғаҡтарына тиҫгән доклад менән район прокуроры **Й. М. Томртаев** сығыш яһаны.

Тикшерелгән мәсьәлә буйынса РОВД начальниҡы **М. Х. Мөхәмәтов**, Бүребай поссоветы башҡарма комитеты председателе **Л. А. Шатненко**, ауыл хужалығы работниктары профсоюзы райкомы председателе **А. И. Сабин**, райпо председателе **И. Н. Ҡаҡпов**, Аҡъяр ауыл Советы башҡарма комитеты председателе **Я. А. Марущак**, Фрунзе исемендәге колхоздың партбюро секретары **З. С. Мәҡаярова** сығыш яһанылар.

Ҡәҙәшмә эшендә КПСС райкомы секретары **М. Г. Некрасов** ҡатнашты һәм сығыш яһаны.

АГРОПРОМЫШЛЕННОСТЬ КОМПЛЕКСЫ:

ТӘЖРИБӘ ҺӘМ ПРОБЛЕМАЛАР

Россия баҫыуҙары: прогресс юлдары

Россия Федерацияһының ауыл хужалығы министры Леонид ФЛОРЕНТЬЕВ АПН хәбәрсеһе Олег БОРИСОВ һорауҙарына яуап бирә.

—Россия Федерацияһы СССР территорияһының дүртҙән өс өлөшөн тәшкил ита, унда 140 миллион самаһы кеше йәшәй, илдәге игендең ҙартыһынан күберәге Россия баҫыуҙарынан йыйыла. Тулы иген үҫтереү районы булараҡ, яҡын йылдарҙа ул Азыҡ-түлек программаһына ярашлы рәүештә иген йыйыуҙы шаҡтай арттырырға тейеш. Билдәләнгән пландарҙы үтәү өсөн ниндәй саралар күрелә?

—Тәүҙә пландар тураһында бер нисә һүҙ. Хәҙерге, ун беренсе биш йыллыҡта йыллыҡ тулайым уртаса ауыл хужалығы продукцияһы күләмен беҙҙең республика буйынса кәмендә 13 процентҡа арттырыу ҡарала. Әгәр иген тураһында әйтырым һүҙ алып барғанда, йыл һайын уны етештереү уртаса 134—136 миллион тонна, ә ун икенсе биш йыллыҡта 140—142 миллион тонна тәшкил итергә тейеш. Россия Федерацияһы ерҙәрендә ошо тиклем уңыш алыу еңелдән түгел.

Тулайым иген йыйыуҙы арттырыу пландарында төп иғтибар уңышты күтәреүгә йүнәлдерелә. Бының өсөн һәр районда, һәр колхоз һәм совхозда, урындағы үҙенсәлектәрҙе һәм шарттарҙы иҫәпкә алып, игенселектең фәнни яҡтан нигеҙләнгән системаһы планлы рәүештә индерелә.

Минераль ашламаларға килгәндә яҡындағы йылдарҙа улар беҙҙең республикала нигеҙҙә иген һәм мал аҙығы культуралары ерҙәрен ашлау өсөн йүнәлдереләсәк.

Ауыл хужалығы культураларының индустриаль технология талаптарына яуап бирерлек яңы гибридтарын селекциялау эше тағы ла киңерәк колас аласаҡ. Мехиттең кулайһыҙ факторҙарына, барлығынан элек короложҡа бирешмәй торған, яҡшы сифатлы һәм юғары потенциаль уңыш бирерлек райондаштырылған сорттарҙы булдырыу һәм индереү күҙҙә тотола. Орлоксолоҡто яҡшыртыу һәм уны промышленность нигеҙенә күсереү эше активлаша бара.

Бойомға ашырыласаҡ саралар комплексы Төньяҡ Кавказ, Волга буйы, Урал менән Себерҙең дала райондары хужалыҡтарында юғары сифатлы ҡаты һәм көслө сортлы бойҙайҙың тулайым йыйымын тоторокло рәүештә үҫтерергә мөмкинлек биреҫәк.

—Ауыл хужалығындағы уңыштарҙың күп яҡтан ауылды квалификациялы механизаторҙар менән тәмин итеүгә бәйләнгәнлеге сер түгел. Россия Федерацияһында был таҡталда эштар нисек тора?

—Бөтә илдәге кеүек, беҙҙең республикала ла механизаторҙар күп әҙерләнә. Ҡайһы бер колхоз һәм совхоздарҙа ошондай белгестәрҙең етешмәүе барлығынан элек кадрҙарҙың йыш алмашыныуы менән аңлатыла: кешеләр, уларҙың фекеренсә, хеҙмәт һәм конкуреш шарттары бик ҡаты булмаған хужалыҡтарҙа эшләргә теләмәйҙәр. Был хәлде төҙәтеү һәм кадрҙарҙы ауылда ныҡлыу өсөн беҙ торлаҡ, культура-конкуреш учреждениелары, хеҙмәтләндереү сфераһы предприятиелары төҙөүҙе киңәйтеү буйынса күп кенә саралар күрәбеҙ.

Механизаторҙарҙың хеҙмәт шарттарын еңеләйтеү, уның эффектлылығын күтәреү мәҡсатында техник хеҙмәтләндереү станциялары селтәре киңәйтелә, яңы мастерскойҙар төҙөлә, элеккеләре яңынан йыһазландырыла.

Механизаторҙар кадрҙары әҙерләүҙе артабан киңәйтеү һәм яҡшыртыу өсөн беҙҙең министерство республиканың Мәғариф министерствоһы менән берлектә ауыл мәктәптәрендә өлкән класс уҡыусыларына мәҡсатҡа йүнәлешле профессиональ ориентация биреү буйынса ҙур эш алып бара, ауыл мәктәптәренең һәм профессиональ-техник училищеларҙың производство базаһын ныҡытыуға өҫтәмә средстволар һалына. Һөҙөмтәләр оҙаҡ көттөрмәне: күп кенә өлкәләрҙә, край һәм автономиялы республикаларҙа үҙҙәренең тыуған колхозында һәм совхозында эшкә калыусы өлкән класс уҡыусылары күбәйгәндән-күбәйә бара.

—Быйыл ауыл хужалығы эшсәндәренең тормош хәлен артабан яҡшыртыу буйынса саралар тураһында ҡарар ҡабул ителде. Россия Федерацияһында ул конкрет алғанда нимәлә сағылаҫ?

—Ауыл эшсәндәренең тормош хәлен яҡшыртыу —хәҙерге ваҡытта илдә бойомға ашырылған Азыҡ-түлек программаһының айырылғыһыҙ һәм мөһим өлөшө ул. Быны бер генә миҫал.

Һуңғы ваҡытҡа тиклем үҙ һөнәре буйынса билдәле бер хужалыҡтағы эш стажы өсөн тракторсы-машинистар ғына өҫтәмә хаҡ алды. 1983 йылдан башлап был льготалар Урал, Себер, Алыҫ Көнсығыш Ҡара тупраклы булмаған зона һәм Үҙәк ҡара тупраклы район малсыларының күп һанлы отрядына тараласаҡ. Ә 1984 йылдан Россияның ҡалған райондарындағы малсылар ҙа ошондай льготалар менән файҙаланасаҡ.

Ауыл хужалығы работниктарының ғаилә бюджеты ҙур дәрәжәлә уларҙың колхоз һәм совхоздар тарафынан бүленгән усадьба яны участкаларынан нимә алыныуына бәйләнгән. Колхоз Уставына ярашлы рәүештә бер колхозсы ғаиләһенә 0,5 гектарға ҡәҙәр, ә һуғарылыу ерҙәрҙә 0,2 гектарға тиклем участка бирелә. Даими рәүештә ауыл ерендә йәшәүсе һәм эшләүсе совхоз һәм башҡа ауыл хужалығы предприятиелары эшселәренә, белгестәренә һәм хеҙмәткәрҙәренә 0,3 гектарға тиклем усадьба яны участкаһы бирелә.

Беҙ ауылда йәшәгән һәр ғаиләнең усадьба яны участкаһы тотоуына, мал һәм ҡош-корт аҫырауына өлгәшергә тырышабыҙ. 1982 йылда, мәҫәлән, колхоз һәм совхоздар шәхси яҙмсы хужалыҡтарға 8,3 миллион сусҡа балаһы һәм 315 миллион ҡош-корт ҡатты, сабынлыҡ, көтөлөк, шулай уҡ иген фуражы, бесән һәм башҡа аҙыҡтар бүлеүҙә ярҙам күрһәтте.

Колхозсыларға һәм совхоз эшселәренә хеҙмәт хаҡын натуралата түләүҙе арттырыу буйынса күптән түгел ҡабул ителгән өҫтәмә саралар ҙа ауыл халҡының шәхси яҙмсы хужалығын үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк. Агрономия, зоотехния һәм ветеринария службаларының шәхси яҙмсы хужалыҡтарҙың эшенә иғтибары арта бара.

(АПН).

„Красный доброволец“ колхозы механизаторҙары башланғысына ҡушылып

Ремонтсыларҙың ҡышҡы эштәре

Маҡан совхозы механизаторҙары ваҡыттарын бушҡа үткәрмәй. Улар машина-трактор паркын яҙғы баҫыу эштәренә әҙерләй. Социалистик ярышинициаторҙары—«Красный доброволец» колхозы механизаторҙарының башланғысына ҡушылып үҙәк ремонт мастерскойы ремонтсылары, механизаторҙар ағымдағы йылдың яҙына тиклем бөтә техниканы әҙерләп бөтөргә ҡарар итте.

—Квартал планын үтәйәсәкбеҙ,— тип ышаныс менән әйтә ремонт мастерскойының инженер-контролеры Л. П. Кулиненко. Мәҫәлән, дүртенсе кварталда план буйынса 26 урынына төрлө маркалы 34 трактор ремонтланыҡ. Хәҙерге көндә 13 трактор ремонтлана, 17 тракторҙы ремонтлайбыҙ ала. Бер һүҙ менән әйткәндә, 20 мартҡа тиклем беренсе кварталда ремонтланырға тейеш булған бөтә тракторҙар мастерскойҙан сығасаҡ.

— Бик күптәр беҙҙең коллективта,—тип дауам итә һүҙен Леонид Петрович,—ҙур дәрәжәлә ҡәнәғәт, кәндәлек нормаларын 150—160 процентҡа үтәй. Улар — сварщик Рәфхәт Дагиров, слесарь Иван Столовой, токарь Роман Кәйпов, механизатор Николай Макаров, Слесарь Рим Атанов та уларҙан ҡалышмай. Ә моторист коммунист Анатолий Филиппович Соловьев ярыш башында килә. Ул үткән йылдың декабрь айы заданиеһын 197 процентҡа үтәне. Темп һәм сифат— ремонтсыларҙың төп девизы. Улар тракторҙар мастерскойҙан яҡшы ремонтланып сыҡһын өсөн тырышалар. Инженер В. Х. Фәббәсов, инженер-контролер Л. П. Кулиненко һәм мастерской мөдире Н. Д. Михноларҙың күҙәтеүе аҫтында машиналарҙың етешһеҙлектәре ентекләп йүнәтелә. Һәр деталь, һәр узел ремонттан һуң һәм уны монтажлауҙан алда иғтибар менән тикшерелә. Машиналарҙы әҙерлек һызығына уларҙың әҙерлеген яҡшылап тикшергәндән һуңғына куялар.

Техниканы әҙерләүҙә урындағы рационализаторҙар ҙур өлөш индерә. Уларҙың тырышлығы һәм оҫталығы һөҙөмтәһендә күп кенә деталдәр һәм узелдар сафҡа баҫтырылыуҙа.

Бөтә машина-трактор паркын биш йыллыҡтың өсөнсө йылының яҙғы эштәренә ышаныслы итеп әҙерләргә — совхоз ремонтсылары үҙҙәренең алдына шундай бурыс ҡуйҙылар.

У. ИЛЕМБӘТОВ.

ҺҮРӘТТӘ: Рәфхәт Дагиров.

МОРАЛЬ ТЕМАҒА

Дәрәжәгеҙҙе юғалтмағыҙ

Йыш ҡына, эш буйынса командировкаларға йөрөгән саҡта, эскелек фактлары һәм уның күңеллеҙ һөҙөмтәләре менән осраширға тура килә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы беҙҙә был социаль бәлә тулыһынса юҡҡа сығмаған әле. Беҙҙең бөтөбеҙ ҙә ғәҙәтә эскелек фактларын ирҙәр араһында күреп өйрәнгәнбеҙ. Кем булып эшләмәһен, йәшмә ул йәки картмы, даими эскелек менән шөғөлләнгән ирҙәргә ҡарауы ерәнес. Ә инде эскән ҡатын-ҡыҙҙы күреү икеләтә ауыр һәм ҡыҙғаныс.

Даими рәүештә эскелек менән шөғөлләнгән ҡатын-ҡыҙҙарҙан иң таҙа балалар интегә. Уларҙың тормошо фажиғаға әйләнә. Улар тик әсә генә бер алырлыҡ бөтә нимәләрҙән дә мәхрүм булалар.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең районда үҙҙәренең әсәлек дәрәжәләрен, намыҫын юғалтып, эскелек менән шөғөлләнгән ҡатын-ҡыҙҙар ҙа бар. Был Уфимск поселогынан Хәҙисә Ильясова, Гөлсинә Мысыргалина, Мөғлифә Дасманова һәм башҡаларға ҡағыла. Улар милиция һәм йәмәғәтсәлек тәрәк пунктының сәкырыуына ла эскән килеш килергә баҙнат итҡәндәр, шуның өсөн Г. Мысыргалинаға 10 һум күләмендә штраф һалына. Ә Х. Ильясова «йәшел йыланды» артыҡ эсеү һөҙөмтәһендә үҙен тота алмай, дружинниктар һәм милиция работниктарын яман һүҙҙәр менән әрләй башлай, һөҙөмтәлә ул эске эштәр бүлегенең айыҡтыҡыс бүлегенә оҙатыла.

Целинный поселогында йәшәүсе Рәмзиә Уйылданова, Римма Шалгинова, Асия Фәббәсова, Валентина Исакова, Фаина Уршеева, Устинья Бикинина, Әнисә Байымова, Алһыу Таңҡатарованар әсәлек бурысын һәм намыҫын ныҡ ла түгел, ә йәмәғәт, бергә эшләгән ипташтарҙы һәм ауылдаштары алдында ла үҙ тойғоларын юғалтҡандар.

Улар араһында хатта район больницаһының наркология кабинетында хроник алкоголик рәүешендә иҫәптә тороусылар ҙа бар. Администрация, ауыл Советы, ҡатын-ҡыҙҙар Советы тарафынан бер нисә тапҡыр тикшерелеүҙәренә ҡарамаҫтан, улар тейешле һығымтаға килмәйҙәр һәм эскелек менән шөғөлләнеүҙәрен дауам итәләр.

Үҙҙәренә тейешле һығымтаға килеп, эскелекте ташлап, төҙәлеү юлына аяҡ баҫырға ваҡыттыр инде.

Улар аңларға һәм үҙҙәрен 2 йылға хеҙмәт профилакторийына мәжбүри рәүештә алкоголизмдан дауалау өсөн эбәрергә мәжбүр итмәҫкә тейеш. Сенки беҙҙең районда эскелек менән шөғөлләнгән ҡатын-ҡыҙҙарҙы мәжбүри дауаланырға эбергән оҫтаҡтар булғаны юҡ.

В. СОЛТАНОВ,
РОВД янындағы медицина айыҡтырыу профилактика кабинеты начальнигы.

Елена Кузьминична Тахтарова Ахыр совхозының Үҙәк булексаһе профилакторийында бығау ҡараусы булып эшләй. Малсылар коллективында уны эшкә намыҫлы ҡарағаны өсөн хөрмәт итәләр. Хәҙерге ваҡытта Тахтарованың теркәмәнде 50 бығау иҫәпләнә һәм уларҙың бөтәһе лә көр. Елена Кузьминична үҙенең бығауҙарынан һәр ваҡыт яҡшы артым алырға һәм уларҙы тәуәл һаҡларға тырыша. Һәм был уның ҡулынан килә. Үткән юбилей йылында ул 340 баш бығау тәрбиәләне, ә бер йылда тәүлегенә уртаса 850-шәр грамм артым алды.

ҺҮРӘТТӘ: Е. К. Тахтарова.

В. УСМАНОВ фотолары.

РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР

БЕҢҘЕҢ КОНСУЛЬТАЦИЯ

ҮКЫЛ АҮКСАҺЫҢ ИҮӘПЛӘШЕҮ

Күл аҡсаһыҙ иҡәпләшеү һаҡлыҡ кассалары тарафынан халыҡҡа күрһәтелгән хеҙмәттең иҫ уңайлы төрҙәренең береһе булып иҡәпләнә. Вкладтар буйынса счетҡа эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡы, колхозыларҙың аҡсалата доходтары, промышленностың айырым тармаҡтарында эшләүсе эшселәргә һәм хеҙмәткәрҙәргә оҙаҡ йылдар эшләгәнде өсөн бер тапҡыр бирелә торған пособие, эҙерләүҙәр ойошмаларына тапшырған мал һәм башҡа ауыл хужалығы продукцияһы өсөн граждандарға биреләсәк аҡса, пенсиялар һәм башҡалар күл аҡсаһыҙ юл менән күсерелә.

Һаҡлыҡ кассалары халыҡҡа кимәтле әйберҙәр һатып алыу өсөн генә түгел, ә һәр төрлө аҡсалата иҡәпләшеү өсөн дә аҡса туплауҙа мөмкинлек бирә.

Һәр ғаилә квартира, электр, балалар баҡсаһы, ясле, музыка мәктәптәрендә уҡыған балаларына түләү өсөн ай һайын һаҡлыҡ кассаһына мөрәжәғәт итә. Шулай ҡылып, бынан өсөн һаҡлыҡ кассаһына һәр сәкта ла килеү мәжбүри түгел. Вкладчиктарға күл аҡсаһыҙ иҡәпләшеү хоҡуғы бирелгән. Уның төп асылы шунда: һаҡлыҡ кассаһы вкладчиктың һорауы буйынса уның счетынан күрһәтелгән суммаға вкладчик түләргә тейеш булған ойошма иҡәбенә күсерә.

Күл аҡсаһыҙ иҡәпләшеү вкладчиктарға ҙур уңайлыҡ тыуҙыра, сөнки улар эшләгән урынынан аҡса алыуға, аҡса һалыу өсөн һаҡлыҡ кассаһына барып, вақытын әрәм итмәйенсә, үҙҙәренең вкладтарын тулыландыра барыу мөмкинлектәренә эйә.

Шул уҡ вақытта коммуналь һәм башҡа хеҙмәт өсөн һаҡлыҡ кассалары аша күл аҡсаһыҙ иҡәпләшкәндә, вкладчиктар вақыттарын күпкә икономиялайҙар.

С. УСМАНОВА,
баш бухгалтер.

БЫНЫ БЕЛЕҮ ФАЙҘАЛЫ

УСТАВТАҒЫ ҮҘГӘРЕШТӘР

Райондың һунарсылар йәмғиәтендә 269 ағза иҡәпләнә. Шуларҙың 20-һе дәүләткә йәнлек тиреһе тапшырыу тураһында райондың әҙерләүҙәр контораһы менән килешеү тәҙәгән. Һунарға хоҡуҡ бирелмәйенсә, балыҡсылыҡ йәмғиәтендә 188 кеше иҡәпләнә.

Үҙған сезонда йәнлек тиреһе табыу һәм тапшырыу планы 102 процентҡа, йәки пландағы 569 урынына 683 һумға үтәлде. Һунарсылар йәмғиәте ағзалары А. Я. Карпеев үҙенең йәкләмәһен 130 процентҡа, Ю. М. Ҡырымгужин—127, И. Н. Алексеев—108 һәм М. В. Волжанин 101 процентҡа үтәне. Йәнлек тиреһе тапшырыу буйынса З. Урыҫбаев, М. Саптарьяпов, Д. Йәйләүев, Р. Ҡужин һәм башҡалар һәйбәт эшләне.

Ләкин законды тупаҫ рәүештә боҙоу фактҙары һаман дауам итә. Табылған йәнлек тиреһен бөтә һунарсылар ҙа дәүләткә тапшырмай, Иәмәғәт инспекторҙары, ауыл Советтары башҡарма комитеттары урындарҙа был мәсәләгә иғтибар биреп еткермәй.

РСФСР Министрҙар Советының ҡарары тарафынан һунарсылар һәм балыҡсылар йәмғиәттәре союзы Уставына үҙгәрештәр индерелде. Ағзалыҡ һәм ағзалыҡҡа инеү взностарын түләү түбәндәге күләмдә билдәләнә.

Һунарға һәм балыҡ тотоуға хоҡуҡ алыу өсөн инеү һәм ағзалыҡ взносы—10 һум. Һунарға хоҡуҡ бирелмәйенсә, балыҡ тотоуға инеү һәм ағзалыҡ взностары—5 һум. Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтары өсөн һунарға һәм балыҡ тотоуға взнос күләме 3 һум, һунарға хоҡуҡ бирелмәйенсә, балыҡ тотоуға—1 һум.

Ағзалыҡ взностары һунарға йәки балыҡ тотоуға тәү башлап сыҡҡанға тиклем түләнә. Ағымдағы йылда 30 июндән дә һуңға ҡалмаҫҡа кәрәк.

Йәмғиәткә ағзалыҡҡа кандидаттар инеү взносын 10 һум, ә ағзалыҡ взносын 5 һум күләмендә түләй. Һуғыш инвалидтары ағзалыҡ взносын 3 һум күләмендә бирә, ә йәмғиәт ағзалығына ингәнсә инеү взносы түләтелмәй. Әгәр һунарға һәм балыҡ тотоуға сыҡҡанға тиклем 1983 йыл өсөн взностар түләнмәгән булһа, һунарсылыҡ билеттары ғәмәлгә яраҡһыҙ, тип иҡәпләнәсәк.

С. АРСЛАНОВ,
һунарсылар һәм балыҡсылар йәмғиәте идараһы председателе.

Беҙҙең Зөлфиә

Зөлфиә Ғәбәйҙуллина Подольскиҙа врач булып ни бары ярты йыл эшләй. Шулай булыуға ҡарамастан, ул үҙен тик ыңғай яҡтан ғына күрһәтергә һәм дауаланыусыларҙың һөйөүен һәм хөрмәтен яулаған ҡыҙ.

Зөлфиә Исмәндияровна пациенттарҙы иғтибар менән тыңлай, дөрөҫ диагноз ҡуя һәм дарыу яҙып бирә. Ул даими рәүештә дауаланыусылары янында була. Үҙенең тыныс, һөйкөмлө тауышы менән ауырыуҙы тынысландыра һәм көйефен күтәрә. Бер һүҙ менән әйткәндә, беҙҙең Зөлфиә (уны ауылдаштары шулай тип атай) дарыу менән генә дауаламай.

Зөлфиә Исмәндияровнаны бигерәк тә балалар ярата һәм хөрмәт итә, сөнки ул уларға ҡарата алсаҡ һәм мөләйем. Уны йыш ҡына мәктәптә, балалар баҡсаһында күрергә мөмкин.

М. ТУҠТАҒОЛОВА.

Уңған киномеханик

Фәхрислам Иҡсәнбаев Иҡсәнгилде ауылында биш йылдан ашыу киномеханик булып эшләй. Бәләбәй киномеханиктар училищеһын тамамлағандан һуң ул тыуған ауылына эшкә ҡайтты. Фәхрислам даими рәүештә яҡшыраҡ эшләргә, ауыл халҡын кинофильмдар менән хеҙмәтләндереү культураһын күтәрергә тырышыуы менән айырылып тора.

Ул һәр көндө иртән Хәйбулла совхозының Үҙәк бүлексәһенә ашыға, сөнки кискә вақытына кино алып килеп еткерергә кәрәк.

Ф. Иҡсәнбаев үҙенең эшенә ҙур яуаплылыҡ менән ҡарай һәм билдәләнгән заданиеһын ай һайын үтәп килә.

Беҙ район газетаһы аша Фәхрисламға ҙур рәхмәт белдерәбеҙ һәм хеҙмәтенең киләсәктә лә ауылдаштарына шатлыҡ һәм яҡшы ҡайеф килтереүен теләйбеҙ.

Иҡсәнгилде ауылы халҡы исеменән ИҠСӘНБАЕВА һәм БУЛӘКӘРОВА.

Зәңгәр экран

Шиншәмбе, 25 гинуар

8.00—Вақыт. 8.40—Документаль фильм. 9.05—Мультфильм. 9.15—«Йәрәккә операция». Телеспектакль. 10.55—Концерт. 11.25—Телевизион фильм. «Станиславский». 11.55—Яңылыҡтар. 14.00—Яңылыҡтар. 14.20—Документаль фильмдар. 15.20—«Тыумышым— ваала сәктан». А. Фадеев. 16.05—Экономика экономияны булырға тейеш. 16.20—Концерт. 16.35—Беҙҙең хәбәрселәр һөйләй. 17.05—Баскетбол буйынса СССР чемпионаты. Иҙәр. 17.45—Фән һәм тормош. 18.15—Бөгөн донъяла. 18.30—«Аҡ ҡыш йырҙары». 18.45—«Бер генә артта ҡалыусы ла булмаһын». «Мәскәү—Сортировочная депоһы эшселәре менән әңгәмә. 19.20—Күп серияны нәфис телевизион фильм. «Ҡояшлы ел». 4-се бүлек—«Наран тауында осрашыу». 20.30—Вақыт. 21.05—Документаль фильм 22.10—Бөгөн донъяла. 22.25—Бер аҙнала спорт.

Шаршамбы, 26 гинуар

8.00—Вақыт. 8.40—Иәштәр ижады. 9.10—«Ҡояшлы ел». Күп серияны нәфис телевизион фильм. 4-се бүлек— «Наран тауында осрашыу». 10.25—Ҡайҙандар донъяһында. 11.25—Документаль телевизион фильм. 11.45—Яңылыҡтар. 14.00—Яңылыҡтар. 14.20—Документаль фильмдар. 15.25—Бөтә Союз художество күргәҙмәһе «Рәссамдар—халыҡҡа». 15.45—Ҡайҙа һеҙ, боҙҡосолар. 16.30—Иреҡле көрәш буйынса халыҡ-ара осрашыу. СССР һәм АҠШ йыйылма командалары. 17.00—Концерт. 17.30—Телеочерк. 18.15—Бөгөн донъяла. 18.30—Һиндостандың милли байрамы—Республика көнө ҡарата. 19.10—Күп серия лы нәфис телевизион фильм. «Ҡояшлы ел». 5-се бүлек—«Надя менән Митяның юбилейы». 20.30—Вақыт.

Кесәҙна, 27 гинуар

8.00—Вақыт. 8.40—Ҡайҙа һеҙ, боҙҡосолар? 9.25—«Ҡояшлы ел». Күп серияны нәфис телевизион фильм. 5-се бүлек—«Надя менән Митяның юбилейы». 10.40—Халыҡ ижады. 11.25—Концерт. 11.50—Ауыл архитектураһы. 12.20—Яңылыҡтар. 14.00—Яңылыҡтар. 14.15—Документаль фильм. 15.10—Беҙҙең менән эшлә, беҙҙең кеүек эшлә, беҙҙән яҡшыраҡ эшлә. 16.10—Шахмат мәктәбе. 16.40—Концерт. 17.00—Документаль телевизион фильм. 17.30—Милләндәрҙең ленинсы университеты. 18.00—Һәр һүҙгә — ҡояш. 18.15—Бөгөн донъяла. 18.30—Фильм-концерт. 19.20—«Ҡояшлы ел». Күп серияны нәфис телевизион фильм. 6-сы бүлек—«Яҡлау». 20.30—Вақыт. 21.05—Телевизион фильм 22.30—Концерт.

Йома, 28 гинуар

9.10—«Ҡояшлы ел». Күп серияны нәфис телевизион фильм. 6-сы бүлек—«Яҡлау». 10.20—Балаларға ҡайҙандар тураһында 10.50—«Карпаттағы ауыр трасса». 11.20—Шишмәләр. 12.00—Документаль фильм. 12.30—Яңылыҡтар. 14.00—Яңылыҡтар. 14.20—Документаль телевизион фильм. 15.05—Баскетбол буйынса Европа чемпионаты кубогы. Иҙәр. 16.35—Рус теле. 16.10—Концерт. 16.50—Өкиәтә дуҡаҡта. «Буратино мажаралары», 2-се серияһы. 18.00—Телевизион очерк. 18.15—Бөгөн донъяла. 18.35—Кеше һәм закон. 19.05—Халыҡ моңдары. 19.20—«Бөйөк халыҡ дөрөҫлөгө». Документаль телевизион фильм. 20.30—Вақыт. 21.05—Кинопанорама. 23.00—Фильм-концерт.

Шәмбе, 29 гинуар

8.00—Вақыт. 9.35—Фильм-концерт. 9.15—«Спортлотоның 5-се тиражы. 9.25—Беҙҙең өсөн, ата-әсәләр! 9.55—Яҡшы тауарҙар күберәк булһын. 10.25—Уҡыу тәҡәрәгә. 11.10—«Еңеүселәр». Фронтташ дуҫтар клубы. 12.40—Кеше. Ер. Иһеан. 13.25—Концерт. 13.50—Бөгөн донъяла. 14.05—Күҙ күреп ышанмаҫлыҡ. 15.05—Фильм—балаларға. «Диңгеҙ ҡултығында». 15.35—Политик күҙәтеүсе Летунов әңгәмәне. 16.05—«Башһыҙ һыбайлы». Нәфис фильм. 17.45—9-сы студия. 18.45—Концерт. 20.30—Вақыт. 21.05—Хоккей буйынса СССР чемпионаты. «Крылья Советов»—«Спартак». 2—3-сө осоҙҙар. Тәнәфестә—«Сәләмәт булайым тиһәң». 22.30—Сит ил эстрадаһы моңдары һәм ритмдары. 23.20—Яңылыҡтар.

Йәкшәмбе, 30 гинуар

8.00—Вақыт. 8.40—Будильник. 9.10—Советтар Союзына хеҙмәт итәм! 10.10—Сәләмәтлек. 10.35—Музыкаль программа «Иртәнге почта». 11.25—Киножурнал. «Бөтәһенә дә белергә теләйем». 11.40—Ауыл сәғәте. 12.40—Музыкаль киоск. 13.10—«Һәм мин тағы ла һеҙҙең менән... «Нәфис телевизион фильм. 14.25—Музыкаль тапшырыу. «Һеҙҙең хаттарығыҙ буйынса». 15.10—Коньки ҙа уҙышыу спорты буйынса Европа чемпионаты. Иҙәр. 15.40—Рәссамдар тураһында хикәйәләр. А. Пластов. 16.40—Мультфильм. 16.50—Футболға күҙәтеү. 17.20—Халыҡ-ара панорама. 18.05—Киносәйәхәттәр клубы. 19.05—«Минең өсөнсө курсташым мәхәббәтем». Нәфис фильм. 20.30—Вақыт. 21.05—Хоккей.

АУЫЛ ӨСӨН ПРОЕКТТАР

САРАТОВ. Бөтә Союз «Гипропромсельстрой» институты коллективы ауыл хужалығының материаль-техник базаһын нығытыуҙа һәм артабан үҫтереүҙә актив ҡатнаша, ул — индустриаль нигеҙгә планлы рәүештә күсереүгә һәр яклап булышлыҡ итә. Институт проекттары буйынса илдең күп кенә региондарында техник хеҙмәтләндереү һәм ремонтлау предприятиелары тәҙәлә.

К-700 тибындағы тракторҙарға техник хеҙмәтләндереүҙе һәм ремонтты ҙәҡләштерелгән тәртиптә үткәреү өсөн прогрессив технологияны һәм ҡоролмалары булған предприятиелар комплексы «Гипропромсельстрой» тарафынан эшләнгәйне. Улар юғары баһа алды.

ҺҮРӘТТӘРҘӘ: генплан һәм транспорт бүлегенән бер төркөм проектлаусылар. Һулдан уңға—инженерҙар С. Белова, Т. Маннесова, группа етәксеһе В. Алимова һәм инженер Э. Макоян. Улар Саратов өлкәһендәге Ершовск ремонт заводын проектлауҙа актив ҡатнашты. Уңда — ошо предприятиеның К-700 тракторҙарын ремонтлау линияһы.

Ю. НАБАТОВ фотолары.
(ТАСС фотохроникаһы).

Редакторы Ш. М. БАЙҒУСҠАРОВ

Бүребай руда идаралығы администрацияһы, партия, профсоюз комитеттары, хеҙмәтсәндәр коллективы торлаҡ-коммуналь бүлек начальниғы

НЕКРАСОВ Василий Андреевичтың

үлеп ҡалыуы сәбәбәле мәрхүмдең туғандарына һәм яҡындарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

КПСС-тың Хәйбулла райкомы аппараты, культура работниктары профсоюзы райкомы партия райкомының ойоштороу бүлеге мөдире Ф. Ш. Таңғатаровтың әсәһе

ТАҢҒАТАРОВА Зөлфә Баймөхәмәт ҡыҙының

үлеп ҡалыуы сәбәбәле уның һәм туғандары менән яҡындарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

Редакцияның адресы: Аҡъяр ауылы, Сиҙәм проспекты, 37.

Телефондар: редактор—2-11-95, редактор урынбаҫары, яуаплы секретарь һәм ауыл хужалығы бүлеге—2-15-95, партбүлек—2-13-97, редактор урынбаҫары, тәржәмәселәр—2-14-95, хаттар бүлеге һәм радиохәбәрсе—2-13-95, фотохәбәрсе—2-14-93, типография директоры—2-15-62, цех—2-14-87.

Орган Хайбуллинского райкома КПСС и районного Совета народных депутатов БАССР.

Газета аҙнаһына ике тапҡыр: шишәмбә, кесәҙна, шәмбе көндәрендә башҡорт һәм рус теленә сыға.

Башҡорт АССР-ы Нәшриәт, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Хәйбулла район типографияһы. Заказ № 141. Тираж 2350